*Фәнил КҮЗБӘКОВ,*
*филология фәндәре докторы*

# Яҙмыш ҡиссаһы

Әҙәбиәткә мөкиббән уҡыусы йыш ҡына художестволы әҫәрҙең сюжеты, алға һөргән идеяһы, ыңғай һәм кире геройҙары тураһында ғына түгел, ә авторҙың үҙе хаҡында ла уйлана. Кем ул? Ниндәй тормош юлы үткән? Әлегеһе көндә хәл-әхүәле нисек? Йәшәйеш асылын ниҙә күрә? Айырата ҡыҙыҡһындырғаны — әҫәрҙәрендә алғы планға сығарған ҡиммәттәргә үҙе тормошта, ысынбарлыҡта ла тоғро ҡаламы? Әллә берҙе көйләп, икенсене сөйләйме?

Ҡәҙимге уҡыусы, ғәҙәттә, әҙипте әҫәрҙәрендәге ыңғай геройҙар, прогрессив идеялар солғанышында күрергә теләй. Ижадсы өсөн дә ҡулай был. Кем һөймәлекле имидж булдырыуға ҡаршы килһен?! Шағир ҙа әҙәм балаһы! Шул сәбәпле кемгәлер бәйле төрлө мифтар тарала икән — ғәжәпләнәһе түгел. Ә бит күптәрҙә осраған йомшаҡлыҡтар уға ла хас булыуы бик ихтимал.

Тормош тигәнең шулай ҙа ғәжәп ҡатмарлы. Әммә, нисек кенә булмаһын, тәғәйен ижад баһаһы, асылда, әҙип шәхесенең йәмғиәттәге дөйөм роле, ул тыуҙырған художестволы әҫәр күтәременә тап килеү-килмәүе менән үлсәнмәйҙер, тим мин. Алыусыны бит тауарҙың хужаһы түгел, ә тауарҙың үҙе ныҡыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Йәғни әҫәрҙең тәү сиратта үҙе мөһимерәк, ә автор артҡы пландараҡ. Ҙурҙан ҡубып, идеаль осраҡтан сығып эш иткәндә, әҙиптең үҙен дә күҙ уңынан ысҡындырырға ярамайҙыр, әлбиттә. Яуға күтәрелергә оран һалыусының ихласлығы, һүҙенең баһаһы уның яу мәлендә алда булыу-булмауына туранан-тура бәйле шул.

Был йәһәттән Хәсән Назарҙың шәхсән биографияһы әҫәрҙәрендә һүрәтләнгән лирик геройының тормош юлы, ғүмер артылыш-талпыныштары, үрелеш-бөгөлөштәре менән ярашып килә. Шағирҙың тура һүҙлелеге, ярамһаҡланыуҙы, ике йөҙлөлөктө бөтөнләй үҙһенмәүе һәм һөйһөнмәүе уны күрә белеүселәргә яҡшы билдәле. Шуға ла уның:

Малтабарлыҡ менән мас булманым,
Хас булманы миңә яранлыҡ, —

тиеүе урынлы. Йәки:

Ағиҙелдән Ҡариҙелгә һалып,
Мең һелкһәң дә, мин – шул Хәсәнмен,
Һүҙе, күҙе менән һатыу итмәҫ,
Буш маҡтауҙы көтмәҫ сәсәнмен, —

тип тәкрарлауында ла ныҡлы ерлек бар. Ысын шағирлыҡтың бары ғазаптар аша ғына бирелеүен дә яҡшы аңғара ул. Был бигерәк тә Пушкин, Некрасов, Есенин тураһында һүҙ барған "Рус тройкаһы"нда айырым-асыҡ сағылыш тапҡан:

Килмәне һеҙгә мәшһүрлек,
Юҡ, килмәне күктәрҙән.
Ерҙән ул ғазаптар һеҙҙе
Күктәргә бит күтәргән…

Икенсе шиғырында ла ошондай уҡ ҡараш үткәрелә:

Яралтҡандыр донъя Шекспирҙы
Ерҙе уяу тотҡан ғазаптарҙан…

"Мәртәбә"лә иһә, "Талант иң тәү – үҙеңә аяуһыҙлыҡ", тип раҫлай. Улай ғынамы:

Рухыбыҙҙы әгәр,
Рәссам булып,
Төшөрә лә алһам киндергә,
Ҡасыр инем мин һүҙ ғазабынан… —

тип тә әйтеп һала. Бер шиғырын "Ижад ғазабы" тип атауы ла тикмәгә түгел. Шағирҙың рухи ҡиммәттәре, төп йәшәү принциптары рухташ остаздарына ҡарата эскерһеҙ мөнәсәбәтендә лә сағыла. Мәҫәлән, Рәми Ғариповҡа ул шундай юлдар бағышлай:

Рухың менән шундай ғали булдың,
Нисек яҙҙың – шулай йәшәнең,
Нисек йәшәһәң һин – шулай яҙҙың,
Бөгөлөп-һығылманың, кәүшәйеп…
Күңелем көмбәҙендә күпме йондоҙ!..
Иң яҡыны – һинең исемдә.
Был донъяла мин йәшәйем икән,
Һин булырһың һәр саҡ иҫемдә…

Пушкинға ("Пушкин урамы", "Пушкин тураһында уйланғанда"), Хәсән Туфанға ("Туфан юлы"), Александр Твардовскийға ("Китте шағир"), Назар Нәжмигә, Мостай Кәримгә, Рауил Бикбаевҡа, Тимер Йосоповҡа, Рәшит Солтангәрәевҡа ("Яуа ямғыр"), Әмир Әминевҡа ("Беҙ тотҡан юл") арналған шиғырҙарында ла һүҙ барған әҙиптәр менән фекерҙәш, моңдаш булып ҡала ул.

Тейерен ишетә йөрөү яңы ижади осоштарға рухландыра, үҙеңә ышанысты арттыра барыуы яҡшы билдәле. Хәсән Назарҙың үҙе хаҡында ла, ижадына бәйле лә ҡәләмдәштәре эҫе мәлендә мәртәбәле һүҙ әйтә килде. Әле 1971 йылда сыҡҡан тәүге йыйынтығын уҡ Рәми Ғарипов күтәрмәләп алғайны. Тыуған төйәккә, бөркөт йөрәкле халҡына булған һөйөү тойғоһон "Шағир үҙенсә баҙыҡ образдар, ихлас йөрәк һүҙе һәм философик фекерләүҙәр аша бирергә тырыша", — тигәйне шиғри телебеҙҙең ҡурҡыу белмәҫ йырсыһы. Назар Нәжми Хәсән На-

зарҙы — ”кешеләрҙе шиғырлы итер өсөн, тимәк, иманлы итер өсөн килгәндәрҙең береһе”, ә ”Асманға ашыу” китабын — ”тотош әҙәбиәтебеҙҙең үҙе бер байлығы”, тип баһалаһа, Ғайса Хөсәйенов: ”Хәсән Назар бар асылы менән милли шағирыбыҙ”, — тип һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Өлкән ҡәләмдәштәренә рәхмәтле булыуын әҙип шиғыр юлдары аша былай аңғарта:

Күңелемде минең үҫтерҙеләр
Хаҡ баһала аҫыл заттарым…

Икенсе шиғырында үҙенә ҡарата күрһәтелгән диаметраль мөнәсәбәтте лә асыҡлай:

Ҙур йәндәрҙән һөйөлдөм мин,
Ваҡ йәндәрҙән тибелдем мин.
Танып ҙур һәм ваҡ йәндәрҙе,
Үҙемде үҙем белдем мин…

Был күренешкә башҡасараҡ юҫыҡтан да күҙ һала:

Әммә әле мин йәшәйем!
Йөрәк әле тибә – йырлай.
Бөйөктәр ҙә, көйөктәр ҙә
Күҙ уңынан ысҡындырмай…

”Яҙмышты яҙам”, ти ул. Ә бит һәр бер яҙмыш ҡайһы яғы менән булһа ла үҙенсәлекле, фәһемле. Заман заңын йөрәге аша үткәреүсе шағир яҙмышы тураһында инде әйтәһе лә түгел. Был яҙмышты авторҙың әҫәрҙәре аша күҙаллап ҡарайыҡ булмаһа.

Хәсән Назарҙың лирик геройы әсә ҡарынында сағында атаһы, яуға китеп, ил азатлығы өсөн барған һуғышта башын һала:

Мин тыуған йыл атай яуҙа үлгән…
Йылдар төпкөлөнән
Ишетелә атай тауышы:
Ал һин ҡулға донъя яҙмышын…

Был васыятка тоғро ҡалырға тырышасаҡ ул, сөнки уның инаныуынса, ”киткәндәрҙең өмөттәре ҡала был ерҙә”. Шуға ла үҙаллы тормош юлына аяҡ баҫҡанда, хушлашыуы ни саҡлы ҡыйын булмаһын:

Юҡ, туҡтатма, әсәй, улыңды,
Минең өсөн кем һуң юл ярһын?
Өмөттәрем еккән аттарҙы
Бәхеттәрем генә туғарһын, —

тиәсәк. Эйе, бары яҡты өмөттәр, йондоҙло хыялдар алып сыға кешене юлдарға. Маҡсаттарға етеү өсөн иһә эреле-ваҡлы күпме йылғалар кисергә, күпме әселе-сөсөлө яҙмыш һурпаһын һемерергә, береһенән-береһе ҡатыраҡ һынауҙар үтергә тура киләсәк! Сабырлығың шартлап һыныр сиккә етер, ваҡ йәндәрҙең, тар эсләләрҙең хаслығы үҙәктәреңә үтер… Асырғанып:

Ҡорбан салырғамы —
Туғара көн
Өмөттәрем еккән аттарҙы, —

тип тә әйтеп һаласаҡһың... Әлегә иһә ул ҡулдарына “икмәк есе һеңгән”, йөҙөнә “таң нурҙары ҡунған” әсәһенә шиғри һәйкәл ҡоя, сөнки бары әсәйең — берҙән-береһ баласаҡтың илаһилығын ҡурсалаусы, бары уның ҡосағында ғына:

Донъяла юҡ кеүек йәш түгеүҙәр,
Донъяла юҡ кеүек сикләүҙәр...

Күңел түрендә сағыу ҡояш йөрөткән үҫмер йоҡомһораған илаһи донъяны ”һары түшкәй — аҫыл ҡош булып” уятырға теләй, уны яратырға, ҡәҙерләргә кәрәклегенә төшөнә бара:

Бала сағым яҙҙы йөрәгемә:
Ер – ҡәҙерле, ғәзиз, ер – изге!..

Уны, яҙмышын ҡәһәрле һуғыш һулышы тамғалаған етем малайҙы, туйындырған, һыйындырған өсөн генә түгел, ә ҡуйынында ерҙе “һыуытмаҫҡа ятҡан ҡаһармандар” булғанға яҡын һәм ҡәҙерле ул! Һуңыраҡ ул был кисерештәрен:

Ер тойғоһон, ер йылыһын алып,
Киндектәрем бында береккән.
Яҙмышымды минең айырып ҡара,
Айырып ҡара ошо ерлектән, —

тип дөйөмләштерәсәк, “Сафлыҡ нимә – шишмәләрҙән белдем, Тауҙар әйтте үрҙәр барлығын” тип донъяны нисек таный барыуын аңғартасаҡ. Ошо ғәзиздәрҙән-ғәзиз, изге ергә ҡарата мөнәсәбәткә бәйле үҙенә рухташ булырлыҡ арҡаҙаштар табасаҡ:

Игеҙәк яһай, ахыры, йөрәктәрҙе
Тыуған ер тойғоһо, ер моңо...

Шул ерҙә ул бесән сабыр, ял иткән арала салғыһын “йәшен сыңлатып сүкеп” китер, иген игер, “Рәғинә туплауы”нда тылсымлы әкиәттәр тыңлап, “рух тауына күтәрелеп”, көтөү көтөр... Бер үк мәлдә мал утлатҡан саҡтарында “тауҙарында ҡояш юллап” йөрөйәсәк. Ҡәһәрле һуғыштың үкһеҙ балалары “иртә ултырҙы быуынға, тартып тормош йөктәрен”. Әммә нисек кенә булмаһын:

Мөнәжәттәр тыңлап үҫкәнгә лә,
Ҡайғыларҙан күңел ҡатмаған.
Ул көндәрҙең иҫтәлеген хәтер
Һағынырлыҡ итеп һаҡлаған...

Еренә ерегеп бил нығытҡан егеткә хәрби хеҙмәт тә ауыр тойолмаҫ (“Хәрби эш — йомош түгел ул, Приказ үтенес түгел”). Артабан төп

шөғөлө гәзит-журнал редакциялары менән бәйләнер. Был хаҡта ул “Алды матбуғат көслө саҡтарҙы”, тип һүҙ төйнәр. Әммә “Ирек бирмәнем Аһ-зарҙарыма. Йөрәкте һалдым Шиғырҙарыма”, тип бил яҙыр. Ысынлап та, ҡайҙа ғына булмаһын, ниндәй генә ҡыйынлыҡтарға дусар ителмә-һен, табан аҫтында ул һәр саҡ ерен тойор, ә баш осонда йә сағыу ҡояш, йә ай-йондоҙло күк әйләнер (“Күтәрһә лә мине ерем, Күҙ ҡарамда — ҡояш-айым”), күңелендә иһә халыҡ моңо, халыҡ йыры тирбәлер:

Ҡош юлы — өмөт юлы.
Ниңә моңға күмеләм был саҡ,
Көтмәҫтән күңел тулып…

Сөнки:

Ниндәй генә хәлдә лә ул башҡорт
Йырҙан башҡа һис көн итмәгән.
Аш ҡайғыһы юҡ, тип әйткәндә лә,
Йыр ҡайғыһы юҡ, тип әйтмәгән…

Бына ни өсөн Хәсән Назар әйләнә-тирәне туған халҡының тере бер күҙәнәге булараҡ ҡабул итә, халҡы өсөн ҡәҙерле булған ҡиммәттәр уның өсөн дә ғәзиз, халҡын борсоған хафалар уның өсөн дә оло ҡайғы:

Һандуғас ҡайтыр үҙәндәр,
Ыласын ҡуныр үрҙәр!
Һеҙҙе өҙөлөп һөймәгәндәр
Үҙҙәрен кәмһетерҙәр…

Артабан:

Ожмах бар, тиһәләр әгәр,
Тыуған ерҙәр ожмахтыр, —

тип һоҡлана. Ындай ерҙә ул, әлбиттә, үҙ бәҫен-дәрәжәһен бик яҡшы белгән ир-уҙаман:

Аҡҡан саҡта ырыҫ юллап
Һаҡмар, Ҡаҫмарт һәм Эйек,
Йән бирерҙәй ерем барҙа
Йөрөмәм башты эйеп…

Йәки:

Сал бөркөттәр саңҡыр сағыл үрҙәр
Сәмләндереп ирҙе, көс бирә…

Шишмә-йылғаларын шағир тыуған еренә йыр, ҡобайыр ырыусылар итеп күрә:

Алҡымынан алһа йәйге селлә,
Ҡуйынына ерҙең һарыла.
“Ҡорой бит ул” тигән Ҡороюлым
Мулҡып ҡайта тағы ярына.
Уның шайымы ни Ағиҙелем,
Дим, Йүрүҙән, Эйек, Һаҡмарым:
Ергә улар яҙған ҡобайырҙар
Тарихымды һала аҡтарып!..

Шуға ла Хәсән Назарҙың лирик геройы үҙен тыуған еренән башҡа күҙ алдына килтерә алмай. Бындай бергәлек-береккәнлек тойғоһо олоғара яуаплылыҡты ла йөкмәтмәй ҡалмай, әлбиттә:

Һин яҡшыһың, тиһә яҡшы кеше,
Таулыҡайым, һине маҡтайым мин,
Һин насарһың, тиһә насар кеше,
Таулыҡайым, һине һаҡлайым мин…

Ана шул данлы-ҡанлы тарих киләсәк тураһында ла уйланырға мәжбүр итә. Сөнки:

Әйтер өсөн ерлек бар.
Әйтер өсөн тарихтар бар,
Киләсәк бар, ирлек бар…

Тарихтың әсе һабаҡтарын онотмаҫҡа өндәй шағир:

Беҙ һуң ярсылманыҡмы ни
“Ихтилал!” тип уттарҙа?
Дан алдыҡ беҙ, аҙ ҡалдыҡ беҙ
Баш күтәргән саҡтарҙа.
…Булһын рух ораны — алдан,
Уҡ урыны һаҙаҡта…

Сөнки:

Көсһөҙ – күҫәк, рухһыҙ ҡорал ала…
Хәҙер һуғышып түгел,
Һуғышмайса еңеү батырлыҡ…

Ата-бабаларыбыҙҙың өмөт-ынтылыштары, тормошҡа ашмаған хыялдары, изгеләрҙән-изге аманат быуаттар заңы булып тел аша, йыр-моң аша бөгөнгөгә тоташыуын, киләсәккә юлланыуын бик яҡшы аңлай шағир һәм быны образлы итеп асып һала:

Туған телем! Туған моңдар! Һеҙҙең аша
Зиһенемә быуаттар заңы тоташа…

Үкенескә күрә, лирик геройҙы ныҡ әсендергән күренештәр ҙә күп шул. Иң бошондорғаны – милләттең бөгөнгө хәле: ауылда ҡарт-ҡоро ғына ҡала бара (ә бит тәбиғәт балаһы булған башҡортто милләт булараҡ һаҡлауҙа ошоға тиклем тап ауыл ғына хәл иткес урынды тотоп килде!), туйҙар гөрләмәй, сабыйҙар күренмәй, ял көндәре генә ҡаланан ҡайтып ураған йәш-елкенсәк артынан шешә ярсыҡтары ғына ятып ҡала. Был хәлгә тәбиғәт үҙе болоҡһой:

Ҡорой нигеҙ… Ерҙәр етем,
Һыуҙар бойоҡ.
Байый ай ҙа зәғиф кенә
Нурҙар ҡойоп…

Үрһәләнгән шағир иһә, аҙарынып, ауыр һорауҙар ҡуя:

Милләт өсөн йәнен фиҙа ҡылыр
Шәхестәрең ҡайҙа, зат-заңым?!.

Пессимистик һығымталар ҙа яһай:

Бәхетле булыр тимәгеҙ
Кем зирәк, саф, кем хисле…

Ҡыҙғаныс, әммә был һығымта ысынбарлыҡҡа тулыһынса тиерлек тап килә шул. Шуғамылыр, авторҙың төшөнкөлөккә бирелеүе лә ғәжәп түгел:

Арыным ошо хәлдәрҙән,
Моң да, шом тулы йөрәк.
Етер төҫлө ахырызаман,
Гел һағалай шул өрәк…

Әммә сабырлыҡ ҡоршауҙары шартлап һыныр сиккә еткәндә лә алдағы көндәренә ышаныс менән баға:

Бурап ҡына яуған ҡарҙар менән
Аҡ өмөттәр мин дә бурайым.
Ҡот ҡунһын тип бүҫкә бураларға,
Тәңреләрҙән, ахыры, һорайым…

Булмышын яҙа шағир, халыҡ күҙе алдындағы көнитмешен тасуирлай. Ғүмер төшлөгөнә еткәндә лә коммуналь фатирҙа йәшәүенә асырғана (“Йәшәп ятам”), “яңы урыҫтар” иномаркаларҙа сапҡанда трамвайҙа йөрөп ятыуына бошона. Әлбиттә, хәл-торошондоң күптәрҙекенән айырылмауы ғына әҫәрҙәрендең халыҡсанлығын билдәләй алмай әле. Хәсән Назар ижадының үтемлелеге унық халыҡ ижады өлгөләрен әсә һөтө менән йөрәгенә, ҡанына һеңдереп, бөгөнгө көн проблемаларын, халыҡ күҙлегенән сығып, фәлсәфәүи фекерләп, образлы дөйөмләштереүендә, халыҡҡа аңлайышлы һәм яҡын һүҙ ынйылары менән эш итеүендә. Тикмәгә генә ике томлыҡ ”Башҡорт теленең һүҙлеге”н (М., 1993) төҙөүселәр миҫалдар өсөн башҡалар менән бер ҡатарҙан унық ижадына ла мөрәжәғәт итмәгән бит. Хәсән Назар шиғриәте ярҙамында тиҫтәнән ашыу һүҙҙең мәғәнәһе асыҡланған.

Хәсән Назарҙың телгә маһирлығы, әҙәбиәт мәсьәләләрен нескә тойомлауы унық ҡәләмдәштәренә арналған әллә күпме мәҡәлә-очерктарында ла киң сағылыш таба. Шуныһын да әйтеп үтеү урынлы: ҡәләм әһелдәре араһында “Хәсән ҡулы” тигән һүҙбәйләнеш нығыныуын мин “Сифат тамғаһы” итеп ҡабул ҡылам. Йәнә шул яғы ла бар бит әле: кемдер хаҡында уға торошло фекер еткерә алыр өсөн һәр яҡлап та әҙерлекле булыу бик мөһим. Хәсән Назарҙағы киң мәғлүмәтлелек, донъя әҙәбиәте-мәҙәниәтенән хәбәрҙарлыҡ унық мәҡәләләренә генә түгел, шиғриәтенә лә үтеп инә. Шуға ла, “Тыңлау кәрәк беҙгә Бетховенды, аңлау кәрәк беҙгә Блокты”, — тип, саҡырыу ташларға ла хаҡы бар, сөнки үҙе был оранға һәр саҡ тоғро ҡала.

Әҫәрҙәрҙең халыҡсанлығы йола-ырымдарҙы һүрәтләүҙә лә, мәҡәл-әйтемдәрҙе, идиоматик һүҙбәйләнештәрҙе урынлы ҡулланып, артабан ижади

үҫтереүҙә лә сағылыш таба. (Шиғри юлдарға һылтанмалар күбәйеп киткән һымаҡ булһа ла, ҡоро раҫлау килеп сыҡмаһын тиһәк, беҙгә йәнә лә ижад емештәрен барлап ҡарарға тура киләсәк.) Мәҫәлән, **йола-ырым-инаныуҙар**: Мине йырлар әле был бала, тип, Аҡ өмөттәр менән биләп һалған… ("Ғәзиз көндәр"); Мин әле лә – изге хәбәр Илтеүсе илселәрҙәй. Ҡырҡ эшем ҡырылып ятһын, — Йүгерәм һөйөнсөләргә… ("Һөйөнсө"); Баҙарҙарҙа ҡайҙан булһын инде Әсәм бешергәндәй сөсикмәк… ("Ҡайтыу"); Юрайым бары яҡшыға, Ғүмерле беҙҙең ырыу… ("Сәңгелдәк"); Минең дә бит ғәйеп барҙыр төҫлө Ҡайын ҡайғылы ул, тиһәләр… ("Ҡайын ҡайғылы, тиһәләр"); **мәҡәл-әйтемдәр**: Ағасына күрә урманы шул, Урманына күрә ағасы… **идиомалар**: Бил нығытҡан ерҙәр… Мин тыуғас та үҙ хәлем хәл тиеп… Дүрт күҙ менән көткән мине… Күҙҙән төштөниһәм, күрәсәктәр… Иманына инандырып үтте Юлындағы етмеш даръяны… ("Туфан юлы"); Ҡалай итеп ҡулым барһын минең... ("Тәүге һабаҡ"); Сәскәле шул сәнскәк тә Төҫ бирә түмәләскә… ("Сәнскәк"); Мин ҡалала йәшәһәм дә, ауыл, Һинһеҙ бер ҙә күңел асылмай… ("Мин ҡалала йәшәһәм дә, ауыл");

…Төптәренә төштөм көн күрмештең,
Ул хаяһыҙ, ҡотһоҙ, киҫекһеҙ.
Эт тә түҙмәҫ йән яраһын ямап,
Эт ҡайышы булып бөттөк беҙ.
…Тормошомдо һуң мин, ҡыра һуғып,
Ҡалдырайым нисек урамда?!.
Ҡорғатһытма, тиеп, күңелеңде,
Хәлдәремә минең керәлер...
Уртаҡ фатирҙа мин йәшәп ятам,
Көнгә сығам да мин, төнгә ҡайтам…

Фольклор әҫәрҙәренән теге йәки был юлдарҙы ижади файҙаланыу ҙа шиғырҙарға халыҡсан аһәң өҫтәй:

Үлгәне юҡ бейек тауҙың,
Башын монар алғанда ла;
Үлгәне юҡ ҡара ерҙең,
Ҡар аҫтында ҡалғанда ла…

Ҡар башына ҡар етеүҙән бигерәк
Кеше етә кеше башына!

Хәсән Назарға ғына хас һутлы тел, һирәгерәк ҡулланылған, ошо шиғыр эсендә, тап ошо шиғри контекста ғына балҡыш алған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, образлы сағыштырыуҙар йыш осрай: Бакуй үрелә толомдай… ("Туғайҙа"); Ниҙе уйлап, нигә ҡағылһам да Хәтирәләр ята тәңкле-тәңкле… ("Ғәзиз көндәр"); Шул ҡәҙәре эҫендергән икән, Таулыҡайым, һинең сәхрәләрең… ("Таулыҡайым сәхрәләре"); Тыуған төйәгемде танһыҡлатып, Иңрәп оса күктә торналар… ("Ҡайтыу"); Күкрәй, суғымланып, күкрәй Төйәгем туғайҙары... ("Муйыл"). Ғөмүмән, Хәсән Назар әҫәрҙәрендә мәҡәл-әйтемдәргә тиң афористик фекерҙәр,

ҡанатлы сағыштырыуҙар, ассоциатив күҙәтеүҙәр, тапҡыр һығымталар осрап ҡына тора:

Шиғыр – дәрес түгел, йән һыуһыны…

Шиғриәтем минең – тормош моңо,
Ул – аҡыл һәм йөрәк хәтере…

Ҡуләүектә түгел, күктәрҙә лә
Йондоҙҙар юҡ, булһаң асыулы…

Үҙ быуыны йомшаҡ булған өсөн
Бер кем дә бит тауҙы әрләмәй…

Һин дә, мин дә – кеше,
Әммә һәр кем
Күрәсәген тик үҙенсә күрер…

Йәшәүҙәр юҡ күбәләктәй
Гөл-сәскәгә күмелеп кенә.
Бәхеттәргә юлдар урау…

Беҙ үҙебеҙ йондоҙ булмаһаҡ та,
Күктәребеҙ беҙҙең йондоҙло…

Тамаҡҡа шул, торһа, ҡылсыҡ тора,
Эре һөйәк бармай тамаҡҡа…

Ғүмер итеү – йәнгә сират үтеү,
Дауаһыҙ ул һалған яралар…
Мин беләмен гүрҙә ни булырын –
Ерҙә күргәндең ул нисбәте…

Ҡайһы бер шиғырҙары тотошлайы менән тиерлек баҙрап торған аҫыл һүҙ гәрәбәләренән туҡыла. Мәҫәлән, “Рәғинә туплауы”:

Мал һыулаған ул бөгәл…
Олон төбө ҡумшырыҡлы
Өйәңкеләре иҫтә…
Яры бейек, ятыуы һай…
Ул һөйләй беҙгә ҡарыһүҙ,
Тарау тарихты төйнәй…
Ул беҙгә йырҙар өйрәтте,
Ул беҙгә ҡойҙо йомаҡ…
Таралыштыҡ… Ҡалды туплау…
Онотолдо аулағаштар…
Баҡһаң, булған икән дә ул
Рәғинә – ил инәһе!
Алдым мин ғүмерлек һабаҡ,
Таптым мин шиғыр йәбен,

Инәйемә бауыр баҫып,
Үтеп Рәми мәктәбен...

Йәки:

Бөттө инде арамъялар
Был тормошто нәжесләп.
Ике донъя – бер мөрйә тип,
Мәж киләләр мәжлесләп...

Кимәле шулмы замандың,
Юл ҡуя күрәләтә.
Ҡырым сиреүе арамъя
Үҙ ярағын үрләтә.

Үр һайын ҡойроҡ яңыртҡан
Кеҫәртке кеүек власть.
Фарманы бар, дарманы юҡ,
Ҡуштанға буштан ҡалас...

“Беҙ уны һаҡлай алманыҡ,
Ул үҙе һаҡланмағас...”

Хаҡы ҡайтмай хаҡ ғүмерҙең,
Һатмағас, һатылмағас...

Көнләксә булмағас аҡыл...
Өйөңдә өйҙәш хәлендә...

Ҡайҙа бара, кем юл яра –
Уйлаймы икән халыҡ?
Янмаймы икән йөрәге,
Хәленә хайран ҡалып?..

Мөхәббәтле йәшәйештең илаһилығы, ҡабатланғыһыҙ булыуы, ошо- но аңлап һағышланыу, яҡының, ҡәҙерлең өсөн мөмкин булмаҫтайҙы ла эшләргә әҙер тороу тап Хәсән Назарса, образлы еткерелә:

Тамуҡтарҙа булһам, мин янырмын
Йылы биреп һинең өйөңә...

Йәки:

Таңдарҙы һин йоҡлап ҡаршылама,
Таңдар ҙа бит беҙҙән ҡаласаҡ...

Йә булмаһа:

Аҙашҡан йырҙар ҙа ҡайтып,
Сәләм бирә йәшлектән.
Иҫкә төшә һөйгән йәрҙәр,
Ҡояш ауғас төшләктән...

Бындайҙар, йөрәк хәтерен һәр саҡ йылытып, фанилыҡтан баҡый- лыҡҡаса оҙата бара:

…Йәнең иңкәлерҙәй кешеләр,
Баҡтынииһәң, саҡырыр сәғәтһеҙ ҙә,
Сәбәпһеҙ ҙә иҫкә төшәләр…

Әйтергә теләгән фекерҙе уҡыусы күңеленә түкмәй-сәсмәй еткерә алыуҙа тәғәйен форма “бесеме” лә ҙур роль уйнай. Был бигерәк тә төрлө шиғыр үлсәмдәрен ювелирҙарса бер нәзәкәтлелек менән файҙалана алыуҙа асыҡ күренә. Мәҫәлән, ”Бабич строфаһы” тип йөрөтөлгән 5-әр ижектән ҡойолған шиғырҙар:

Бәүелә ҡарҙар
Йыбанып ҡына.
Һиллектә саҡ-саҡ
Уянып ҡына…

Ауыр уйҙарҙан
Бөгөлөр тимә.
Тәҡәте ҡороп,
Бөлөнөр тимә…

Халыҡ ижады традицияларын бөгөнгөгә ярашлы үҫтереү, мәҫәлән, ҡобайырҙар рухын аңҡытыусы, төрки шиғриәтендә боронғоларҙан һаналған 7-әр ижекле строфаны уңышлы ҡулланыуҙа сағылыш таба:

Әрәмгә китер көсөң,
Көслө менән көрәшмә.
Үҙеңә төшөр үсең,
Бай менән хөкөмләшмә…

8-әр ижекле строфалар ҙа бар:

Бына яуыздың ҡәбере,
Хәҙер инде юҡ йәбере.
Ҡәберенең минең өсөн
Бер ниндәй ҙә юҡ ҡәҙере…

Шулай ҙа иң йыш осрағаны — башҡорт халҡының тарихи йырҙарына хас булған 10—9 ижекле шиғырҙар:

Ағыу ҙа ул, дарыу ҙа ул, тибеҙ,
Эсә белеп кенә эс, тибеҙ.
Эсә белеп кенә эсә торғас,
Ҡырыла бит милли күсебеҙ…

Ошо уҡ фекерҙе халҡыбыҙҙың лирик йырҙары үлсәме — 8—7 ижекле миҫалдар менән дә нығытып була:

…Бында күңел ишегенә
Юҡ, элеп булмай келә.

Шомло һәм тын ҡәберлектә
Уйҙар ҙа ишетелә.

”Аҡмулла строфаһы” тип йөрөтөлгән 11-әр ижекле шиғырҙар ҙа бар:

Беләм үҙемде һәм беләм Тәңремде,
Юғары рух тәбиғәттән шағирҙа.
Сәсәнлектә мин дә түгелме вариҫ,
Ялған әҙәп һаҡлап ниңә шымырға!..

Һуңғы осор шиғриәтендә йышыраҡ осраған 8—6 үлсәмле строфалар күҙгә салына:

Мин ҡул бирмәгән кешеләр,
Дошман түгелһегеҙ.
Һеҙ инде һурып алынған
Һөлөк кеүекһегеҙ.
Ҡан таҙарҙы, күҙ асылды,
Рәхмәт “һөлөктәр”гә.
…Донъя мохтаж түгел тимә
Һөлөк кеүектәргә.

9-ар ижекле строфаларға ла тап булаһың:

Мин уяу. Күңелем һаҡ. Йырлай төн.
Әйтерһең, ҡумыҙмы – сыңрай өн.
Әйтерһең, аһ-зар юҡ донъяла,
Халҡым да ҡайғыһыҙ бер бала…

10-ар ижеклеләренә лә юлығаһың:

Эс-бауырға инеп төпсөнәһең,
Мине минән былай белеү ниңә?
Ышаныстан артыҡ ышаныс юҡ,
Шунан уҙһаң, шик уянмаҫ тимә.

Күренеүенсә, Хәсән Назар башлыса шиғриәттең традицион шәкелдәре менән эш итә. Ритмик быуындар тураһында һүҙ йөрөткәндә уларҙың эске музыкаллек ҡанундарына буйһоноуы хаҡында әйтеү урынлы һымаҡ. Бер үк мәлдә ритм-интонациялағы традиционлыҡ строфаларҙың ғәжәп күп төрлөлөгөнә ҡамасауламай һәм, иң мөһиме, был төрлөлөк үҙмаҡсатҡа әйләнмәгән. Шиғри үлсәмдәр йөкмәткене асыуға, күңел кисерештәрен, әйтергә теләгән фекерҙе түкмәй-сәсмәй ҡағыҙ битенә төшөрөүгә йүнәлтелгән.

Шиғриәттең эпик жанрҙары, прозалағы кеүек үк, ижади әҙерлек кенә түгел, ә ысынбарлыҡҡа, йәшәйешкә тәү сиратта киңерәк ҡараш, фекерләүҙең фәлсәфәүи тәрәнлеген, ҡоласлы дөйөмләштереүҙәр талап итә. Хәсән Назарҙың был йүнәлештәге табыштары ла үҙенә генә хас булыуы менән айырымлана. “Поэма” тип исемләнгән әҫәрҙәре лә был

жанрҙың ғәҙәти сиктәренә һыйып бөтмәй, ҡәҙимге үлсәмдәргә лә тап киленҡерәмәй тиерлек. “Яҙмышты яҙам”ды, мәҫәлән, яҙмышҡа бәйле уйланыу (урыҫсалап әйткәндә, исповедь-монолог), тип ҡарау дөрөҫ булыр ине, моғайын. Унда сюжет та, бер ваҡиға ла юҡ. Күңел иңрәүе, уҙғандарҙы барлап, үкенес тойғоһо кисереү, йөрәк әрнеүе генә бар. Әммә әҫәр поэма кимәленә етмәгән дә, баһаһы ла бер сама, тип нарыҡлау – төптө дөрөҫ булмаясаҡ. Ни тиһәң дә, ысын ижад емешенең ҡиммәтен жанр билдәләмәй. Был – аксиома. “Яҙмышты яҙам” иһә шағирҙың күңел түрендәге иң изге тойғолары менән ихластан уртаҡлашыуы ул. Ниндәй генә ҡыйынлыҡтарға дусар ителеүенә ҡарамаҫтан, лирик герой (Хәсән Назар!) донъяның яҡтылығына инана, “биҙрәтһәләр ҙә”, тормоштан “биҙмәгән”. Шуға ла “Ашыҡма, Ҡояш, Ҡояш, байыма”, — тип үтенә. Сөнки уның ҡулында ҡәләме, күңелендә халҡына әйтәһе һүҙҙәре етерлек әле.

“Иманға инаныу” мәҙхиә тип тамғаланған. Иманға, иманлы булыуға дан йырлай шағир, “Иманымды һатмай, һатылмайса Мин көн итәм ерҙә түҙем менән”, тип раҫлай. Юҡ, ҡоро раҫлау ғына түгел был, ә бәндәләге мосолманлыҡ аша килгән иң кәрәкле сифаттарҙы образлы асып һалыу. Иртә-кисен Тәңреһенә һығыныуы ла хаҡлыҡ хаҡына, иманлы, кешелекле булғанға эшләнә. Шағир өсөн “Фанилыҡтағы донъя көтөүҙәр” тегендә “Сират күперҙәрен үтеүҙәр” менән үлсәнәсәк. Быны шулай аңлап булалыр: әҙәм балаһы ҡылған ҡылыҡтары өсөн ҡасан да булһа бер яуап тотасаҡ. Был донъялыҡта булмаһа, тегеһендә; үҙе тотмаһа, уның ҡаны аҡҡан балалары, ейәндәре, бүләләре… Башҡаса мөмкин түгел! Әгәр ҙә башҡаса була ҡалһа, йәшәү мәғәнәһе юғалыр ине, изгелек, кешелеклелек тигән төшөнсәләр күптән аяҡ аҫтындағы бысраҡҡа буталыр ине…

Шағирҙың — рух илсеһенең күңел тетрәнеүҙәре аша хәҡиҡәткә ҡарашы ”Хакимлыҡта” монологында артабан үҫтерелә. Бында ла автор ”Хәҡиҡәт — иман!” булырға тейешлегенә баҫым яһай. Киләсәккә илтеүсе юлдағы кәртәләрҙе асыҡлай: ”Урыҫлашыу – үҙебеҙҙән, Урыҫлаштырыу – унан… Хуплашын гел хушланыуҙар Алдаҡтарҙы йәшерә… Аһ, был ылғый күндәмлектәр!..”. Милләтте милләт итеүсе телде һаҡлау, ҡәҙерләү, үҙ баһабыҙҙы иң башта үҙебеҙ белеү кәрәклеге әҫәрҙең иңенән-буйына ҡыҙыл еп булып һуҙыла. Хөрриәтте урыҫтың бары тик үҙенсә генә аңлауы, Рәсәйгә ҡушылыуҙың сәйгә (дөрөҫөрәге, ҡымыҙға!) араҡы ҡушыуҙы хәтерләтеүе бошондора, осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарға һала. Ә бит “Урыҫ та бер, башҡорт та бер Хаҡ Тәғәлә алдында”. Эйе, уйландыра шағир, сиселмәҫтәй сырмалған-сеймәлгән төйөндәрҙе сисеү мөмкинлектәре юҡмы икән ни, тип аҙарына.

“Заман заңы” тигән китабының баш һүҙендә: “Ғәмәлдә мин бер китапты яҙам. Ғүмер китабын”, — тигәйне шағир. Был фекерен ул “Яҙмышты яҙам” поэмаһында икенсе юҫыҡтараҡ та үткәргәйне. Әлбиттә, әҙип әйткәнен тәү сиратта кинәйәләү, тип ҡабул итергә кәрәк, йәғни һәр кем бер генә бирелгән үҙ яҙмышын бер генә тапҡыр яҙа, башҡаса мөмкин түгел. Назар Нәжми ҙә быны тап шулай аңлауын билдергәйне. Әммә Хәсән Назарҙы тура мәғәнәһендә фаразлағанда ла ҙур хата булмаҫ кеүек. Хикмәт шунда: уның һәр яңы китабы — яҙмышының тулыландырылған художестволы сағылышы һымаҡ. Шуға ла һуңғы йыйынтыҡта күп осраған “иҫке” шиғырҙар яңыса уҡыла,

яңы әҫәрҙәр улар фонында, улар яҡтылығында яҡшыраҡ аңлашыла. Ысынында ла үҙ яҙмышын яҙа әҙип. Ихлас яҙа, үҙ яҙмышы миҫалында ғибрәтле күренештәрҙе аса, фәһемле һығымталар яһай, намыҫлыларға донъя көтөүе еңел булмауына, әммә иманлы йәшәүҙең илаһилығына инандыра. “Яҙмышты яҙам. Ә үҙем Халҡым яҙмышында мин”, — тип баҫым яһай.

Бер үк мәлдә шуныһына ла күҙ йоморға ярамайҙыр: ҡайһы бер әҫәрҙәрҙә аһ-зар, һыҡтаныу, ниндәйҙер гонаһ, ғәйеп өсөн аҡланыу күңелдә ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәрҙе лә уятып ҡуя. Ҙур әҙипте генә түгел, ҙур шәхесте биҙәп бөтәме был? “Халҡым яҙмышында мин” тиеүен тигәс, шул халыҡ кимәлендә лә ҡалыу мотлаҡ! Туҡай әйткәнсә, ”Халыҡ – ҙур ул…”. Башҡортто, мәҫәлән, үҙ яҙмышына зарланыусы, кемгәлер, нимәнелер иҫбатлаусы итеп күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Ул – бар! Һәм шуныһы менән ҡиммәт! Нимәнелер иҫбатлағың килә икән – һүҙ менән түгел, эшең, ижад емешең менән раҫла! Халыҡтың иһә меңдәрсә йылдар менән иҫәпләнгән тарихи юлы, тәрән ҡатламдарға үтеп ингән тамырҙары, ысыҡта сыланыр ыуыҙ япраҡтары бар. Тағы ла ни кәрәк?! Киләсәк хаҡына тулы ҡанлы тормош менән йәшәү генә кәрәк! Быны үҙ ижады менән шағир үҙе үк раҫлап килә лә баһа! Аҙағынаса эҙмә-эҙлелекле булыу ғына шарт. Быға айырыуса һуңғы шәлкемдәре асыҡ дәлил. Ҡыуандырғаны шул: заман заңы менән йәшәүенә тоғро ҡала шағир. Боларыңҡы донъя хәл-әхүәлдәренә үҙ мөнәсәбәте, үҙ ҡарашы, үҙ фекере булыуын образлы тел, бөгөнгө асыл, дәүер һыҙаттары аша белдерә килә. Ә осор ҡатмарлы. Ерҙә күберәк иманһыҙлыҡ хөкөм һөрә. Ҡаршылыҡлы тормош ҡыҫаларынан Хәсән Назар эскерһеҙ тәбиғәт ҡосағында ғына арынғандай. Ауыр уйҙарҙан аҙарынып, ул: “Аралағыҙ, ҡайындарым, Аралағыҙ, тау буйҙары”, — тип өндәшә. Тик бөгөнгө әшәкелектәрҙән ҡайындар ғына ҡурсып ҡала алырмы икән һуң?!

…Шуныһын да уйлайым: ижадтың лейтмотивылай һуҙылған тетрәнеүҙәр, борсолоуҙар, әрнеүҙәр һәр әҙәм балаһына хас йомшаҡлыҡ касафаты ла, буғай. Был да бит кешелеклелек сифаты! Эйе, башҡаларға ҡарағанда әсерәк тә, һиҙгерерәк тә яҙмышлы ул. Ә иң мөһиме — ҡабатланмаҫ мәлдәрҙән ҡайылған тормошто, йәшәйештең фәлсәфәүи асылын бынамын тигән шиғри юлдарға ҡоя алыу таланты бар. Тап шуғалыр ҙа бар ижады фәһемле яҙмыш ҡиссаһы, Хәсән Назар ҡиссаһы булараҡ ҡабул ителә.

Йөк арбаһын төпкә егелеп тартыусы эш аттары бар. Тай-тулаҡты мисәүҙә өйрәтеп алалар. Бәйге аттары була. Өйөр айғырҙары. Туй юртаҡтары. Йомош-юлға күндәм алашалар… Хәсән Назарҙың ижади аҡбуҙаты иһә — һабансы ла ул, бәйгесе лә.

Бөгөнгө шиғриәт кимәлен тотоусы, XX быуаттан XXI быуатҡа башҡорт шиғриәтенең аҫыл өлгөләрен илтеүсе Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Тимер Йосопов, Абдулхаҡ Игебаев, Фаиһа Туғыҙбаева, Мәүлит Ямалетдиндар араһында мин Хәсән Назарҙы ла күрәм. Милләтебеҙ, телебеҙ йәшәһә, улар ҙа юғалып ҡалмаҫ; ундайҙар булғанда телебеҙ, рухыбыҙ, милләтебеҙ ҙә сал Уралдың ғорур бөркөтөләй зәңгәр күкте бер итеп саңҡыр, һары һандуғасылай тирә-йүнде моңға һуғарыр, күҙҙең яуын алыр сәскә яланылай мең төҫтә балҡыр. Иншалла, балҡыясаҡ!